ISBN 978-5-91608-181-7 С. 30-32

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.005

УДК 811.512.141+373.5

**Л. Ф. Абзалова**

*МБОУ СОШ с. Бишкураево муниципального района Туймазинский район РБ*
*ул. Молодёжная, 3А, с. Бишкураево, Туймазинский район, 452793, Россия*
*E-mail: abzaloval.f@mail.ru*

## ТУҒАН ТЕЛДЕҺАҠЛАУҘА ЙОЛАЛАРҘЫҢ РОЛЕ

Статья посвящена роли фольклора, обрядовых праздников в сохранении родного языка. Родной язык и этноречевое поведение должны приобретаться в семье, однако в настоящее время в башкирских семьях под влиянием телевидения и языковой билингвальной среды дети становятся русскоязычными. За 1-2 часа, отводимые в школе на изучение родного языка и литературы, невозможно постигнуть глубину башкирского языка. Автор находит выход в организации  и проведении фольклорных праздников.

*Ключевые слова*: семья, родной язык, культура, общество, фольклорный праздник, образование.

Баязит Бикбайҙың шиғри юлдары менән килешмәгән кеше юҡтыр. Шағир әйткәнсә: “Тел – тере шишмә – үлмәгән, бөгөнгә еткән! … Ерҙә халыҡ йәшәй икән, – теле лә йәшәй! Телен асҡанда, һәр бала әйтәсәк: «Әсәй!» Мин сикһеҙ хөрмәт итәмен халҡымдың телен, ә кем уны һанға һуҡмай, хурлай тик үҙен!..” [Бикбай, 1932, 25]. Ысынлап та, үҙ телен һанға һуҡмаған кеше үҙенең тамырын үҙе ҡоротоусылыр; үҫемлек тамырһыҙ йәшәй алмаған кеүек, милләт тә телһеҙ ҡорой, тимәк, телдең киләсәге тулыһынса кеше ҡулында.

Билдәле булыуынса, тел – аралашыу ҡоралы ғына түгел, ул кеше аҡылының көҙгөһө лә. Әсә телен белеү – үҙе иң ҙур бәхет, сөнки ғәзиз халҡыңдың бай тарихы, ауыҙ-тел ижады, уй-кисерештәре, киләсәккә өмөтө унда тупланған. Башҡорт теле – башҡорт халҡының күп быуаттар дауамында ижад ителгән емеше. Ата-әсәләрҙең һәм уҡытыусыларҙың бурысы – был изге байлыҡты ҡурсалау, үҫтереү, уға тәрән һөйөү тәрбиәләү. Тәү сиратта ғаиләлә балалар менән туған телдә аралашыу тейешле (юҡҡа ғына уны әсә теле тип атамағандар бит!?). Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, бөгөнгө көндә уҡыусылар телевизорҙан көнө-төнө ҡараған йәнһүрәттәр, тапшырыуҙар йоғонтоһонда, балалар баҡсаһында русса аралашыу нигеҙендә өйҙә атай-әсәйҙәренең туған телдә өндәшеүен бөтөнләй аңламаҫ дәрәжәлә урыҫлаша бара.

1-9-сы класс уҡыусыларына туған телдән һәм башҡорт дәүләт теленән белем бирәм. Башланғыс класс уҡыусылары менән яҡындан аралашыу шуны күрһәтте: мәктәпкә туған телен бөтөнләй белмәгән балалар килә. Был шарттарҙа уҡытыусы иңенә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә: төрлө сәбәптәр арҡаһында ғаиләлә һалынмаған туған тел нигеҙҙәренә өйрәтеү,

ҡыҙыҡһыныу уятыу, белем биреү. Уҡытыусының яҡшы белгес булыуы, дәрестәрҙе мауыҡтырғыс итеп алып бара белеүе бик мөһим, әлбиттә. Балаларҙы ҡыҙыҡһындырыу өсөн заманса яңы технологиялар ҡулланыу бик отошло, мәҫәлән, проблемалы–үҫтереүле уҡытыу алымы, проект алымы, тәнҡитле фекерләү алымы, мейегә һөжүм алымы, уйын алымы, ижади эшмәкәрлек һ.б.; бындай алымдарҙың төрлөлөгө уҡытыусыны уҡытыусы-новатор итеп кенә түгел, сифатлы һәм юғары нәтижәле уҡытыуға ирешеүсе уҡытыусы итеп күрһәтә [Баһауетдинова, Йәғәфәрова, 2009, 6]. Яңы технологиялар ҡулланыу эштең һөҙөмтәлелеген арттыра, уҡыусыларға ла бик оҡшай, әммә был ғына етмәй. Аҙнаһына 1-2 дәрес кенә уҡып, туған тел нескәлектәренә төшөнөү – бик ауыр мәсьәлә. Ауыл мәктәптәрендә иһә, ошо 1-2 сәғәттә ике класс берләшеп уҡығанда, был үтә ҡатмарлы проблемаға әйләнә. Шуға ҡарамаҫтан, әлбиттә, уҡыусылар туған телде өйрәтеү өсөн төрлө эффектив ысулдар табырға тырышып эшләйҙәр.

Бындай эҙләнеүҙәребеҙ халҡыбыҙҙың йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә мөрәжәғәт итергә кәрәклеккә килтерҙе. “Йола ижады – быуаттар буйы халыҡтың тормош-көнкүрешен, рухи байлығын сағылдырыусы боронғо мираҫ”, – тип яҙа Әхмәт Сөләймәнов [Сөләймәнов, 2012]. Әллә нисәмә быуатлыҡ тарихы булған халҡыбыҙҙа йолалар бик күп.

Туған тел – халыҡты халыҡ итеүсе төп билдә. Уны һаҡлап ҡалыу юлдарын эҙләй торғас, шундай һығымтаға киленде: фольклор байрамдарын тергеҙергә кәрәк. Беҙ Туймазы ҡалаһы балалар һәм үҫмерҙәрҙең ижад һарайынан мәктәп базаһында ойошторолған “Йәнгүзәл” фольклор һәм “Йәншишмә” исемле йәш хәбәрселәр берләшмәләрендә был эште башлап ебәрҙек. Уҡыусылар менән бергәләп оло быуын кешеләренән ауылыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йола ижадын яҙып алып өйрәндек, уларҙы тергеҙеүҙә ҡатнаштыҡ. Әйтәйек, мәктәптә “Кәкүк сәйе”, “Ҡарға бутҡаһы”, “Ҡар һыуына барыу”, “Ямғыр теләү” йола байрамдары үткәрелде. Бындай сараларға әҙерләнгәндә балалар туған телдә күп кенә мәҡәл һәм әйтемдәр, йырҙар, йомаҡтар менән танышты, телдең матурлығын ишетергә һәм баһаларға өйрәнде.

2018 йылда ауылдың аҡ инәйҙәре һәм уҡыусылар берләшеп, “Сәғәт һуҡҡан көн” байрамы ойошторолдо. 7 июндә, Сәғәт һуҡҡан көндө, Шифалы шишмәгә барып, йола байрамы уҙғарылды. Балалар менән ауыл мәҙәниәт йортонда ойошторолған “Аулаҡ өй”, “Бәпәй туйы” йола байрамдарында, ауыл Һабантуйында ҡатнаштыҡ, “Тула өмәһе”нә әҙерлектәр алып барыла.

Тәжрибә күрһәтеүенсә, халыҡ ижады әҫәрҙәре, йола байрамдарында актив ҡатнашыу баланың телен байыта, хәтерен нығыта, быуындар бәйләнешенең өҙөлмәүенә булышлыҡ итә. Был иһә балала туған теленә һөйөү тәрбиәләй, телде һаҡлауҙа мөһим сара булып тора.

Туған телен насар белгән балалар ҙа ошо изге эшкә ылыҡтырыла, уларҙың телмәрҙәре өҫтөндә эшләү форсаты барлыҡҡа килә, был иһә, әлбиттә, яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Ысынлап та, халыҡтың йолаларын тергеҙеү, үҙ телендә фольклор байрамдарын уҙғарыу туған телде һаҡлап алып ҡалыу эшендә ҙур ярҙам күрһәтә. Шуға күрә башҡорт телен туған тел йәки дәүләт теле буларaҡ уҡытыуҙа йола байрамдарын байрам рәүешендә үткәреү һәр яҡлап: һүҙ байлығын үҫтереү, милли мәҙәниәтте үҙләштереү, халыҡсан фекер йөрөтөргә өйрәнеү йәһәтенән дә уңышлы һә отошло була.

### Әҙәбиәт


Баһауетдинова М. И., Йәғәфәрова Г. Н. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу. Өфө: Китап, 2009. 176 бит.

Бикбай Б. Үтеп барған көндәр: Шиғырҙар. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1932. 40 бит.

Сөләймәнов Ә. М. Халыҡ әҙәбиәте. Башҡортостан. 2012. № 12.

**L. F. Abzalova**

*Municipal Budgetary General Educational Institution Secondary General School*
*village Bishkurayevo, Tuymazinsky district*
*Youth street, 3A, village Bishkurayevo, Tuymazinsky district, 452793, Russia*
*E-mail: abzaloval.f@mail.ru*

## THE ROLE OF FOLKLORE HOLIDAYS IN PRESERVING THE NATIVE LANGUAGE

The article is devoted to the role of folklore, ceremonial holidays in preserving the native language. Mother language and etnic speech behavior must be acquired in the family. However, at present, in Bashkir families under the influence of television and linguistic bilingual environment, children are becoming Russian-speaking. For 1-2 hours allotted at school to study the native language and literature, it is impossible to comprehend the depth of the Bashkir language. The author finds a way out in organizing and conducting folklore holidays.
*Keywords*: family, native language, culture, society, folk festival, education.

## References

Bahauetdinova M.I., Yagafarova G.N. Teaching Bashkir language and literature in a modern way. Ufa: Kitap, 2009. 176 p.
Bikbai B. Passing days. Poems. Ufa: Kitap, 1932. 40 p.
Suleymanov A.M. Folk literature. *Bashkortostan*. 2012. No. 12.